МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

*Күңел асыу сараһы*

# "Йәйге акланда"

*Йәй килде,йәй!*

**Алып барыусы:** Һаумыһығыҙ ҡунаҡтар!

Ҡыҙҙар һәм дә малайҙар

Йәмле йәй килде беҙгә

Ҡыуанырға саҡыра!

*“Бибика” көйөнә ике клоун килеп инәләр.Береһе ҡулына руль тотҡан,икенсеһе кәрзин тотҡан.*

**Оп:**Хәйерле көн балалар,

Ҡыҙҙар һәм уңған малайҙар!

**Ап**:иҫәнләшеп алайыҡ,



Дуҫлашайыҡ,уйнайыҡ!

**Клоундар:**

-Беҙ бергәләп әйтәбеҙ һеҙгә-

Һаумыһығыҙ! Ә һеҙҙән яуап көтәбеҙ?

**Балалар:**Һаумыһығыҙ!(клоундар балаларға ҡул биреп һаулыҡ һорашалар)

**Клоундар:** Кем һеҙҙе бында саҡырҙы?— Кто позвал сюда вас, дети?

**Алып барыусы:** Беҙ йәйге аҡланға йыйылдыҡ.Балалар менән уйнарға,матур йәйгә ҡыуанырға.

**Оп:**Йәй?Йәйге аҡлан?Нindәй емеш ул?

Ап:Ә кемде шулай саҡыралар?

Алып барыусы:Йәй – ул йыл миҙгеле,әйҙәгеҙ балаларҙан һорайыҡ улар бик күпте беләләр.

**Шиғырҙар**

**Йыр “Йәй килде”**

**Оп:**Ҡайһылай һеҙ шәп,афарин балалар!

**Ап**:Ә һеҙ зарядка яратаһығыҙмы?

**Оп**: Ә бейергә?

**Ап:** Әйҙәгеҙ бергәләп түңәрәккә торайыҡ,тәндәребеҙҙе яҙып алайыҡ.

**Күңелле зарядка**

**Алып барыусы:**Рәхмәт һеҙгә клоундар,бәлки балалар менән уйнап та алырһығыҙ?

**Ап**: Беҙ һәр ваҡыт әҙер генә ул эйеме Оп?

**Оп**: Эйе шул!

*Клоундар уйындар үткәрәләр*

**Уйын-эстафета: "Һыу ташыйбыҙ**"(Балалар ике командаға бүленеп торалар,командаларға һыу бирелә,балалар ҡалаҡлап һыу менән һауытты тултырырға тейештәр)

**Уйын – эстафета "Күңелле ҡояш**"(ике команда,һәр командаға обруч һәм таяҡсалар бирелә,балалар бирелгән арауыҡта ерҙә ҡояш яһайҙар)

**Уйын – эстафета "Тылсымлы таж**"(балалар ике командала,бирелгән арауыҡты урап тажды бер-береһенә бирәләр)

**Ап:** Ә хәҙер әйҙәгеҙ йомаҡтар сисеп алайыҡ.

**Йомаҡтар йәй тураһында.**

**Оп**:бөтә йомаҡтарҙы систегеҙ,уйындарҙа ла һынатманығыҙ.Һеҙҙең йәйге аҡланда ысынлап та күңелле.Беҙгә оҡшап ҡалды,тик ҡайтырға ваҡыт етте.Әсәйҙәребеҙ юғалтты инде.Әйҙә Ап ҡайтайыҡ инде.

**Ап:**рәхмәт һеҙгә балалар,һау булығыҙ,киләһе осрашҡанға тиклем.

**Балалар:**Һаубулығыҙ!!!

**Алып барыусы**:Ҡунаҡтар ҡайтты,ә беҙҙә байрам дауам итә. Майҙансыҡтарҙа төрлө хәрәкәтле уйындар уйнап байрам төркөмдәр майҙансыҡтарында дауам итә.